# Логопед кәңәштәре



**Үҙ йәше өсөн ауыр  һөйләшкән балалар, ҡағиҙә булараҡ, ашауға ла насарыраҡ була. Уларға ҡатыраҡ алма йәки кишер ашауы ауырлыҡ тыуҙыра, итте лә ашауҙан улар баш тарта.**
**Был яңаҡ һөйәктәренең үҫешеп етмәүенән килә  һәм артикуляцион аппараттың хәрәкәтенә ҡамасаулай.**



**Шуға ла балаға ҡаты аҙыҡтар ашатырға кәрәк. Сухари, йәшелсәләр, икмәк ҡайырыһы, киҫәк ит ашау баланың яңаҡ һөйәктәрен дә, тештәрен, теш ҡаҙналарын да нығытасаҡ.**

**Бит һәм тел мускулдарын  нығытыу өсөн баланы ауыҙ ҡыуышлығын сайҡатырға өйрәтегеҙ. Ауыҙ эсенә һауа алып, бер   урттан икенсе уртҡа күсереү күнекмәләрен эшләтегеҙ.**



**Ваҡ моториканы үҫтереүҙе лә онотмағыҙ, бала ни тиклем нығыраҡ бармаҡтарын тыңлатып өйрәтә, шул тиклем телмәр үҫеше якшыраҡ буласаҡ.Түҙемлегегеҙ бик етмәһә лә бала төймәләрен үҙе элһен, бауҙарҙы үҙе бәйләһен, еңдәрҙе үҙе төрһөн.**
**Ваҡыты менән баланан ярҙам һорағыҙ, еңдәрегеҙҙе төрҙөрөгөҙ, төймәләрегеҙҙе  элдерегеҙ. Быларҙы йышыраҡ эшләгән һайын, баланың телмәре лә аңлайышлыраҡ һәм таҙараҡ буласаҡ.**

**Күберәк пластилин, балсыҡ менән  эшләргә шарттар тыуҙырығыҙ. Күп әсәйҙәр балаға ҡайсы бирергә ашығып бармай. Тәүҙә баланың бармаҡтары менән үҙегеҙҙең бармаҡтарығыҙҙы ҡайсы балдағына бергә ҡуйып ҡырҡып өйрәнегеҙ. Һуңынан йоморо башлы, хәүефһеҙ ҡайсылар менән эшләү бала өсөн  ҡурҡыныс тыуҙырмаҫ.**

